

# ИНТЕРНАТЫМ – ПАР ҠАНАТЫМ



Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты

март, 2023 йыл

Февраль айы, март башы гимназияла һәр ваҡыттағыса шаулап-гөрләп үтте: 12 февраль көнө Рәми Ғариповтың рухын иҫкә алыуға арналған линейка, уның исемендәге премия тапшырыу тантанаһы. Ғашиҡтар, Тыуған илде һаҡлаусылар көнө, шағирҙар һәм яҙыусылар менән осрашыу, 8 Мартта хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы тәбрикләү кеүек сараларҙан бер уҡыусы ла, педагог та ситтә ҡалмай, үҙ өлөшөн индерергә тырыша.

Байрам уңайынан гәзит биттәре аша гимназияның ир-егеттәрен ҡотлап үтергә теләйем. Халҡыбыҙ борон-борондан ир-егеттәргә хас ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, ғәҙеллек, тоғролоҡ кеүек сифаттарҙы юғары баһалаған. Был сифаттарҙың һәр осорҙа бик тә кәрәк икәнлегенә тағы ла нығыраҡ инана барабыҙ. Әле яу яланынан ир-егеттәребеҙҙең батырлығы тураһында хәбәрҙәр килеүе оло ғорурлыҡ тойғоһо уята. Улар араһында беҙҙең бер коллегабыҙ, гимназистарҙың аталары, ағалары, туғандары бар... Тыуған ил алдындағы бурысын тоғро үтәргә өйрәнгән ир-аттарыбыҙ һынатмаҫ, тип ышанам.

Гимназия-интернатта элек-электән егеттәрҙе тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүленә: милли көрәш, волейбол, баскетбол, бокс, саңғы ярышы кеүек спорт түңәрәктәре бер өҙлөкһөҙ эшләй һәм унда шөғөлләнеүселәр район, ҡала, республика кимәлендәге уңыштары менән әленән-әле ҡыуандырып тора. Быйылғы уҡыу йылынан Рәис Йәүҙәт улы етәкселегендә «Уҡсылар» түңәрәге үҙенең эшен башланы. Был да бик ҡыуаныслы хәл. Бейеү һәм ҡурай түңәрәгенең дә илһөйәрлек тәрбиәләүҙәге әһәмиәте сикһеҙ. 10-сы кластар өсөн йәй үткәрелеп килгән хәрби әҙерлек көндәре, «Шайморатовсы» кластарының ойошторолоуы һәм уларҙың уңышлы эшләп килеүе – барыһы ла ҙур тәрбиәүи эштең бер өлөшө.



Остаздар һәм педагогтар йылында был эшкә бар көсөн һалып эшләгән уҡытыусыларға, тәрбиәселәргә рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм. Беҙ дөрөҫ йүнәлештә барабыҙ, артабан да көсөбеҙҙе йәлләмәй, милләтебеҙ, республикабыҙ киләсәгенә хеҙмәт итәйек. Яуаплы эшегеҙҙә уңыштар, дәрт, көс, рух, ныҡлы сәләмәтлек теләйем.

Гимназиялағы барлыҡ ир-аттар исеменән һөйөклө һәм ҡәҙерле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы 8 Март байрамы менән ҡотлайым. Тик беҙҙең уҡыу йортонда ғына береһенән-бере һылыу, ҡупшы, эшлекле, изге күңелле, ярҙамсыл, үҙ эшенең оҫтаһы булған ҡатын-ҡыҙҙар эшләй. Бар ерҙә лә өлгөр һеҙ. Ауырығанда ла, ауыр минуттарҙа ла сабыр була беләһегеҙ. Һеҙгә һоҡланмау мөмкин түгел. Байрам уңайынан иң изге теләктәремде еткерәм: йөҙөгөҙҙән бер ҡасан да бәхетле йылмайыу китмәһен, өйҙә лә, мәктәптә лә ҡот-ырыҫ һаҡлап, балаларға күңел йылыһын өләшеп, аңлашып, килеп тыуған ҡыйынлыҡтарҙы бергәләп еңеп, уҡыусыларға ла үрнәк булып, татыулыҡта, берҙәмлектә эшләйек һәм йәшәйек!

***Илнур Рифат улы СӘЛИХОВ,***
*Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры*

## МИЛЛӘТЕМДЕҢ АҪЫЛ УЛЫ...



Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты, арҙаҡлы дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, «Урал» хәйриә фонды етәксеһе, Халыҡтар дуҫлығы һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры, халҡыбыҙҙың тоғро улы Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың яҡты донъяларҙы ҡалдырып китеүенә 40 көн булды. Эйе, йыл башында милләтебеҙ ҙур юғалтыу кисерҙе. Юғалтыуҙың ниндәй оло икәнен күбебеҙ әле аңлап та еткермәйҙер...

Мортаза Ғөбәйҙулла улы республика яҙмышы менән йәшәүсе ил уҙаманы, үткәндәрҙе бөгөнгөгә ялғаусы, арымай-талмай илебеҙгә хеҙмәт итеүсе халыҡ президенты булараҡ иҫтә ҡаласаҡ. Гүзәл Башҡортостаныбыҙ менән етәкселек итеү ваҡытында республикабыҙ бөтә яҡтан ҙур уңыштарға өлгәште. Етәксебеҙҙең даими иғтибарын, тыуған еренә ҡарата һөйөүен тойоп йәшәнек. Айырыуса йәш быуын тураһында атайҙарса хәстәрлек күреүе оло ихтирамға лайыҡ. Миҫал өсөн алыҫ китәһе түгел: 2005 йылда мәктәп-интернаты урамының ҡалҡыу ерендә бөтә уңайлыҡтары булған дүрт ҡатлы мөһабәт бина ҡалҡып сыға, ятаҡтар яңыртыла, спорт майҙаны барлыҡҡа килә, уҡыу һәм йәшәү, ашхана өсөн өр-яңы ҡорамалдар алына. 2014 йылда иһә «Шоңҡар» спорт комплексын төҙөп «Урал» хәйриә фонды гимназистарға ҙур бүләк эшләй. «Былдай комплекс республикала икәү генә, һеҙ бик бәхетле», – тине фонд етәксеһе ҡыуанып. Һанай китһәң, Мортаза Ғөбәйҙулла улының интернат өсөн эшләгән изгелектәре бихисап. Беҙгә бары тик уларҙы күреп, хөрмәтебеҙҙе белдереү кәрәк.

«Саф алтынды нәжескә буяу менән,
Нәжес китер, алтындың заты китмәҫ», – тигән бер шиғырында мәшһүр Аҡмулла. Ил ағаһы башҡарған абруйлы эштәрҙең заты бер ваҡытта ла онотолмаҫ. Онотторға хаҡыбыҙ юҡ!

Тыныс йоҡла, милләтебеҙҙең аҡыллы, рухлы, ғәмле, ырыҫлы, моңло, аңлы, ҡотло ир-уҙаманы!

***Г.С. Ҡылысова**, башҡорт теле уҡытыусыһы,*
*сығарылыш уҡыусыһы **Әғзәмова Вилена** һүрәте*

## 2022 / 2023 УҠЫУ ЙЫЛЫНДА ОЛИМПИАДА ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ

| № | Уҡыусының исем-шәрифе | Класс | Предмет | Статус | Уҡытыусыһы |
|---|---|---|---|---|---|
| | **УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ БӨТӘ РӘСӘЙ ОЛИМПИАДАҺЫНЫҢ РЕГИОНАЛЬ ЭТАБЫ** | | | | |
| 1 | Фәтхелисламова Эльвина | 11 в | биология | еңеүсе | Шәрипова Ләйсән Рауилевна, Гәрәева Светлана Айратовна |
| 2 | Буранбаева Мәҙинә | 10 в | биология | призер | Ҡәҙерова Илүзә Юлаевна, Шәрипова Ләйсән Рауилевна |
| 3 | Ғәлимов Урал | 9 а | инглиз теле | призер | Колпакова Юлия Андреевна |
| 4 | Ғәлимов Салауат | 10 е | инглиз теле | призер | Колпакова Юлия Андреевна |
| 5 | Ҡаһарманов Арыҫлан | 10 а | астрономия | призер | Ҡаһарманова Венера Арыҫлановна |
| 6 | Дәүләтшин Рушан | 10 а | информатика | призер | Насырова Альбина Азатовна |
| 7 | Байсыуаков Айҙар | 11 а | информатика | призер | Ғәлекәев Әмир Наилович |
| 8 | Дәүләтшин Рушан | 10 а | математика | призер | Ханнанова Лариса Гәрәевна |
| 9 | Байсыуаҡов Айҙар | 11 а | математика | призер | Тотманова Сәкинә Хөрмәтовна |
| 10 | Юлғотлина Ләйлә | 10 е | йәмғиәтте өйрәнеү | призер | Шәрәфетдинова Резида Сәлиховна |
| 11 | Усманов Денис | 11 | физик тәрбиә | призер | Абдрафиҡов Фәйзулла Габдельянович |
| 12 | Сәғдиева Камилә | 9 в | экология | призер | Шәрипова Ләйсән Рауилевна |
| 13 | Юлғотлина Ләйлә | 10 е | иктисад | призер | Шәрәфетдинова Резида Сәлиховна |
| | **БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕНӘН ТӨБӘК-АРА ОЛИМПИАДА** | | | | |
| 14 | Йәрмөхәмәтова Илгизә | 11 г | | еңеүсе | Кайбышева Альбина Хәсәновна |
| 15 | Усманова Зөлхизә | 11 г | | призер | Кайбышева Альбина Хәсәновна |
| 16 | Атанғолова Алтынай | 10 б | | призер | Әминева Лилиә Искәндәровна |

*Уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары **А.З. Шәмсетдинов** әҙерләне*

## *Халҡымдың бөйөк улы*

Шиғыр М. Ғ. Рәхимовтың 85 йәшенә арнап яҙылды

*Ул йылды ла февраль иртәһендә
Буран өрҙө микән һалҡын тын?
Күктә яңы йондоҙ ҡалҡты микән,
Бөйөк улы тыуғас халҡымдың?*

*Атай-әсәй ифрат шатланғандыр,
Туптай ғына малай тыуғанға.
Ниндәй генә яҙмыш юрағандыр,
Төргән сакта ап-ак юрғанға? ..*

*Бөйөк улы ил ағаһы булып,
Яулап алды халҡы күңелен.
Сал имәндәй бөгөн баҫып тора,
Ҡотлау – маҡтауҙарға күмелеп.*

*Һәр бер башҡорт һеҙгә сәләм бирә,
Уй – хистәрен бөгөн тыймайҙар...
Һеҙгә булған халыҡ мөхәббәте
Һүҙҙәр ҡалыбына һыймайҙар.*

*Йылдар үткән һайын сағыуыраҡ
Һеҙ башҡарған эштәр сауабы.
Һеҙҙең тормош – үҙе бер батырлыҡ,
Мәңгелек дан булһын яуабы.*

*Тиңдәр араһында тиң иттегеҙ
Күпте күргән башҡорт илемде.
Бөйөк державаға юл ҡуймайса,
Юҡ итергә туған телемде.*

*Башҡорт халҡын бер ҡәүемгә туплап,
Ҡулға бөйөк маҡсат бирҙегеҙ.
Илгә, телгә хужа булығыҙ, тип,
Алдан яуға барып керҙегеҙ...*

*Яңы һулыш өрөп башҡорт ерен
Юғалыуҙан йолоп ҡалдығыҙ,
Шунан алып башҡорт рухы илдә
Ҡеүәтле һәм еңелеп ҡалғыһыҙ.*

*Рәхмәт илгә тоғро ҡалған өсөн,
Аҡыл өсөн, йөрәк, хис өсөн...
Хаҡлыҡ өсөн, башҡорт халҡы өсөн
Йәлләмәйсә түккән көс өсөн.*

*Ил ағаһы!! Беҙҙең уҡытыусы!
Һүҙ бирәбеҙ ҡайнар йөрәктән.
Башҡорт иле, башҡорт теле өсөн,
Халҡыбыҙҙың яҡты көнө өсөн,
Бағышларбыҙ йәнде, кәрәкһә.*

*... Халҡымдың бер бөйөк улы булып,
Тыуғанһығыҙ буран айында.
Ил ағаһы булып күтәрҙегеҙ илде,
Аҡһаҡалы булып, терәк булып,
Оҙаҡ йәшәгеҙ һеҙ тағын да!*

С.Х. Тотманова,
математика уҡытыусыһы

# ҺҮҘЕ ЙӘШӘЙ ИЛЕНДӘ...

## ШАҒИР РУХЫНА БАҒЫШЛАНҒАН САРА

12 февраль көнө – яратҡан шағирыбыҙ, һүҙ оҫтаһы, халҡыбыҙҙың рухи таянысы Рәми Ғариповтың тыуған көнө. Традиция буйынса был көндә, шағирҙың рухына бағышлап, линейка үтә.

Рәми Ғарипов бөтә аңлы ғүмерен халҡыбыҙға хеҙмәт итеүгә бағышлаған, башҡаларҙы сағыу һәм тулы ҡанлы тормош менән йәшәргә өндәгән, телебеҙҙең киләсәге өсөн янып-көйөп йәшәгән шағир. Рәсәй президенты тарафынан быйылғы йыл Остаздар йылы итеп иғлан ителде. Рәми Ғарипов та талантлы шағир ғына түгел, ә йәштәр өсөн ижад мәктәбе тыуҙырған уҡытыусы, кәңәшсе, хәстәрлекле остаз булып ҡала. «Ҡәҙерле уҡыусылар! Һеҙ арҙаҡлы шағир исемен йөрөткән уҡыу йортонда белем алаһығыҙ. Ҡайҙа ғына булһаҡ та, исемебеҙ есемебеҙгә тура килһен ине тип теләйем: уҡыуҙа, эштә, тәртиптә, төрлө бәйгеләрҙә. Рәми дәрестәре, Рәми һабаҡтары һәр ваҡыт беҙҙең күңелдәрҙә булырға тейеш», – тине гимназия директоры Илнур Рифат улы Сәлихов, гимназистарға өгөт-нәсихәт биреп.

Тантанаға килгән хөрмәтле ҡунағыбыҙ филология фәндәре докторы, профессор, Рәми Ғарипов премияһы лауреаты, 500-ҙән ашыу фәнни һәм фәнни-методик хеҙмәттәр авторы,



Ҡаҙағстан һәм Әзербайжан республикаларында, Төркиә, Венгрия, Япония, Франция, Германия илдәрендә Халыҡ-ара ғилми форумдарҙа сығыштары менән ғалимдар араһында абруй яулаған ғалимә Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисаметдинованың, тел белгесе булараҡ, йәнле сығышы бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Телебеҙҙең моңо, сафлығы, уны хөрмәт итеү, һаҡлау, үҫтереү тураһында һүҙ барҙы йөкмәткеле сығышта.

Артабан 11-се класс егеттәре Исхаҡов Илназ, Мөхәмәтуллин Нурислам, Әбсәләмов Фидан, Мәкәримов Арыҫлан, Маҡсудов Марат, Әбделвәлиев Салауат шағирҙың ил-тел темаһына арналған билдәле шиғырҙарын һөйләне.

Рәми Ғариповтың үҙе башҡарыуында «Шиғриәт» һәм «Шағирға» тигән шиғырҙарын тыңлау айырыуса тулҡынландырғыс мәл булғандыр.

*«Календарҙан эҙләп маташмағыҙ*
*Аҡ донъяға килгән көнөмдө –*
*Тыуған көнөм минең көн дә булыр,*
*Һаҡлаһағыҙ туған телемде»*, – тип яҙған Мәүлит Ямалетдинов Рәми Ғариповҡа арналған шиғырында. Был һүҙҙәр гимназистар теләгенә лә тап килә. Тыныс йоҡла, шағир! Рухыңа, антыңа, аманатыңа, мираҫыңа беҙ бер ваҡытта ла тап төшөрмәбеҙ!

Шулай уҡ, йола буйынса, шағирҙың яҡты иҫтәлегенә бағышлап, уҡыу алдынғылары, 11-се класс уҡыусылары Ғәзиз Ҡужин һәм Эльвина Фәтхелисламова, ҡәнәфер сәскәләрен һалды. Рәми Ғариповҡа арналған тантаналы линейка 11 е класы башҡарыуында «Уйҙарым» ҡобайыры менән тамамланды.

***Гөлсинә Мөхәмәтова**, 10 г класы уҡыусыһы*

## ҮЛЕМҺЕҘ ШИҒЫР

Һәр бер бөйөк шағирҙың төп әҫәре була. Рәми Ғариповтың ижадын үлемһеҙ иткән һәм донъяға ҡарашын асыҡ сағылдырған әҫәр – «Туған тел» шиғыры. Һәр рухлы башҡорт яттан белгән был шиғыр ер шарының төрлө тарафтарында – Рәсәй һәм донъя халыҡтары телдәрендә яңғырай. «Туған тел»де Рәми Ғарипов 1957 йылда яҙа. Шиғыр халҡыбыҙҙы уйланырға мәжбүр итә. Хатта шағирҙың тормош иптәше Надежда Васильевна, башҡа милләт ҡыҙы булыуына ҡарамаҫтан, төрлө осрашыуҙарҙа сығышын саф башҡорт телендә ошо шиғыр менән башлаған. Республикабыҙ үҙ аллылығы өсөн көрәш барған заманда «Туған тел» шиғыры халҡыбыҙҙы әйҙәүсе лозунг көсөнә эйә булған.

Бөгөнгө көндә шиғырҙы, шағирҙың ижадын киң танытыу буйынса төрлө эштәр эшләнә (яттан һөйләү конкурстары үткәрелә, интернет селтәрендә флешмобтар ойоштороla). Һәм ошо өлкәләге иң ҙур, ҡыуанысла яңылыҡтарҙың береһе: 2022 йылдың декабрь айында «Туған тел» шиғыры донъя халыҡтары телдәренә тәржемә ителгән йыйынтыҡтың баҫылып сығыуы. Бөйөк шағирыбыҙҙың үлемһеҙ шиғыры хәҙер 45 телдә яңғырай. Рус, украин, итальян, белорус, фарсы, төрөк, әзербайжан, удмурт, мари, немец, чечен, хаҡас, ғәрәп һәм башҡа бик күп телдәрҙә. Мин өс йыл элек өйрәнә башлағанда, биш телгә генә тәржемә ителгән ине. Шуныһы тағы ла үҙенсәлекле: китапта шиғыр башҡорт әҙәби телендә генә түгел, ә төрлө диалекттарҙа ла бирелә.

Рәми Ғарипов үҙе лә тәржемә эше менән шөғөлләнгән, үҙ заманында ул донъя әҙәбиәтенән 50-нән ашыу авторҙың әҫәрен башҡортсаға ауҙара. Бөгөн уның бөйөк әҫәре лә төрлө телдәрҙә уҡыла. «Туған тел» – ул шағирҙың халҡына, иленә, еренә һөйөүен белдергән әҫәр, шуға күрә лә башҡа милләт яҙыусылары был проектҡа әүҙем ҡушыла. Проект авторҙары – шағирә Лариса Абдуллина һәм Светлана Быкова, рәссамы – Азамат Ғарипов, дизайнеры – Анатолий Корнеев. Лариса Хашим ҡыҙының әйтеүе буйынса, ошондай тәржемә тураһында студент саҡтарынан уҡ уйланған икән. Мин иһә гимназияға уҡырға ингәндән алып шиғырҙы бөтә Рәсәй кимәлендә күрһәтеү тураһында хыялланам һәм, ниһайәт, хыялымдың тормошҡа аша барыуына ҡыуанам.

Был китап, йәғни проект, мәшһүр шағирыбыҙҙың ижадын таратыуға тос өлөш индерер, шулай уҡ төрлө милләт вәкилдәрендә туған телгә ҡарата һөйөү тәрбиәләр, тигән ышаныста ҡалам.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев «Туған тел» шиғырына ошондай баһа биргән: «Туған тел» әҫәре хәүефле тенденциялар тураһында беренселәрҙән булып иҫкәртте». Эйе, беҙ бөгөн бәләкәй халыҡтар өсөн айырыуса ҡатмарлы ваҡытта йәшәйбеҙ. Шуға күрә Рәми Ғариповтың «Туған тел»е ошо осорҙа беҙгә рухи ориентир булып тора; наҙлы ла, серле лә, ҡаты ла яңғыраған шиғыр юлдары аманатҡа тоғро булырға саҡыра.

***Азалия Аҡбулатова,** 8-се класс уҡыусыһы*

## РАМИ ҒАРИПОВТЫҢ ӘҪӘРҘӘРЕН УҠЫҒАНДАН ҺУҢ ТЫУҒАН УЙҘАР...

Ошо арала «Аманат» ҡобайырын уҡып сыҡтым. Ҡайһы бер уйҙарымды гәзит уҡыусы тиҫтерҙәремә лә еткерергә булдым. Ҡобайырҙың төп темаһы булып тел яҙмышы тора. Әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан өс бүлеккә бүлеп ҡарар инем.

Беренсенән, тел – аралашыу һәм тәрбиә ҡоралы. Әсәйҙәребеҙ шул ҡоралды файҙаланып, беҙҙе эшле, хисле, көслө иткән, күҙебеҙҙе нур менән, рухыбыҙҙы йыр менән тултырған. Тел беҙҙе кеше иткән! Әммә күпме кеше быны белмәй ҙә, аңламай ҙа?! Рәми Ғарипов шул әҙәмдәргә «бер имгәк һин иленә, бер түңгәк һин халҡыңа» ти.

Икенсенән, тел – тал төпкәйе, йәғни шағир телде тамыр ебәргән ағас менән сағыштыра. «Тамырына балта сапһаң, талың ҡороп ҡалыр ул». Ғаиләндә туған телгә хөрмәт юҡ икән, быуаттар буйы килгән ағас тамырың юҡҡа сығыр. Һәр халыҡ үҙ туған теле өсөн оло яуаплылыҡ тойоп йәшәргә тейеш. Кеше үҙ халҡы, теле өсөн көрәшмәһә, уны яҡлап сыҡмаһа, был йәшәүҙең ни йәме һәм маҡсаты бар? Кеше үҙен уйларға, фекерләргә өйрәткән, быуаттар буйы шымарған, беҙҙең көндәргә ата-бабалар рухын еткергән теленән баш тартһа, дөрөҫ йәшәмәй, тип уйлайым. Балаларҙың теле әсәй тип, йәиһә ниндәйҙер ят телдең һүҙҙәре менән асыламы – бары тик үҙебеҙҙән генә тора. Талыбыҙҙан ҡоро түңгәк ҡалдырыу – ата-бабалар алдында оятҡа ҡалыу тигән һүҙ.

Өсөнсөнән, тел – аманат, беҙгә ата-бабаларҙан килеп еткән хазина. Шағир теле менән әйткәндә, «шуның өсөн һуғыштыҡ, бергәләп ҡан ҡойоштоҡ». Халҡыбыҙҙың азатлығы өсөн баш күтәреп, ғүмерҙәрен биргән шәхестәр бик күп: Салауат Юлаев, Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин һәм башҡалар. Тарихтың һәр битендә беҙҙе иҙергә, юҡ итергә тырыштылар тип яҙылған, әммә «яулап алған тел, һаҡлап ҡалған тел…» беҙгә тиклем килеп етте. Бына ошо – ысын мәғәнәһендә хазина.

Шулай ҙа халҡыбыҙға иң мәғәнәһеҙ үлем дә килергә мөмкин. Ул актарҙан да, ҡыҙылдарҙан да, фашистарҙан да килмәҫ, ә аҡылһыҙлыҡтан, ғәмһеҙлектән, аңһыҙлыҡтан, яуапһыҙлыҡтан килер. Был һеҙгә оран, тиҫтерҙәрем!

Милләтебеҙҙе яратайыҡ, туған телебеҙҙә һөйләшәйек, берҙәм булайыҡ!

***Мәхмүтов Батыр**, 8 е класы уҡыусыһы*

Мой выбор не зря пал именно на стихотворение «Юғалған эҙҙәр». Оно возвращает меня в беззаботное и недалёкое детство. Его строчки ассоциируются с самыми лучшими днями и воспоминаниями. Рами Гарипов повествует о днях, когда они играли в «мам и пап», разговаривали обо всём, еще ничего не зная о жизни. Прекрасные вечера, когда ложишься спать, нагулявшись и наигравшись. Что может быть лучше, чем бегать босиком? А еще первая влюблённость, первые незабываемые прогулки, неловкие и самые трогательные моменты…

Читаю и представляю. Светит солнце, дети нежатся в солнечных лучах. Вот скоро наступит и взрослая жизнь, детство уйдет от них. Им остается только изредка скучать и вспоминать свое детство.

***Сунгурова Ясмин**, ученица 8 е класса*

## БЫЙЫЛҒЫ ПРЕМИЯ ЛАУРЕАТТАРЫ

Быйылғы уҡыу йылында Рәми Ғарипов премияһына 7 кеше лайыҡ булды.

**Мирсәйет Ғүмәр улы Юнысов** – Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Башҡортостан һәм Рәсәй Журналистар союзы ағзаһы, республикабыҙҙа башҡорт телендә балалар һәм үҫмерҙәр өсөн нәшер ителгән «Йәншишмә» гәзитенең баш мөхәррире. Гәзит балаларҙа төрлө яҡлап ижади ҡанаттар үҫтереүсе мәғлүмәт сараһы ул. Мирсәйет Ғүмәр улы – «Йәншишмә» гәзитенең иң оҙаҡ эшләгән (25 йыл) мөхәррире. 1981 йылда мәктәп-интернатты тамамлаған. Бөтә ғүмерен ижадҡа арнап, башта хәбәрсе, гәзиттә бүлек мөдире булып эшләгән. Яҙышҡан, ижад юлын һайлаған уҡыусыларыбыҙға кәрәкле кәңәштәре менән һәр ваҡыт ярҙам итеп тора.

**Наилә Абдулхай ҡыҙы Сәфәрғолова** – Рәсәй Театр эшмәкәрҙәре союзы ағзаһы, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре. Наилә Абдулхай ҡыҙы беҙгә республикала ҙур абруй яулаған билдәле «Йөрәк һүҙе» проекты авторы булараҡ таныш. Был проект, һис шикһеҙ, туған телебеҙҙең абруйын күтәреүгә, уны артабан үҫтереүгә, һаҡлауға тос өлөш индерҙе. Арҙаҡлы әҙиптәрҙең, шул иҫәптән Рәми Ғариповтың, ижадын өйрәнеүгә, яттан һөйләүгә иғтибар бермә-бер артты. Әйткәндәй, бындай проект әле Рәсәйҙең бер регионында ла юҡ. Тимәк, был эште башлап, юл ярыусы ул Наилә апай. Беҙҙең уҡыу йортонда ла һүҙ бәйгеһе үткәреү матур традицияға әйләнде. Мәктәп-интернаттың сығарылыш уҡыусыһы булараҡ (1980), Наилә апай был саранан ситтә ҡалмай. Ул – һәр саҡ беҙҙең көтөп алған ҡунағыбыҙ.

Мирсәйет Ғүмәр улы, Наилә Абдулхай ҡыҙы – туған телдең бәҫен, матурлығын, нескәлеген һүҙ менән генә түгел, ә ғәмәли эштәре менән киләсәк быуынды тәрбиәләүҙә өлгө күрһәткән абруйлы шәхестәр!

11 г класы уҡыусыһы **Зөлхизә Усманова** гимназияға уҡырға Бөрйән районының Яуымбай ауылынан килгән. Мөләйем, баҫалҡы ҡыҙҙың тырышлығы оҙаҡ көттөрмәй: интернатта сыҡҡан гәзит биттәрендә тәүге мәҡәләләре, шиғырҙары баҫыла, артабан «Йәншишмә» биттәрендә күренә. Шулай уҡ Зөлхизә – башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән регион олимпиадаһында ике тапҡыр призер, «Урал батыр» эпосы, Рәми Ғариповҡа арналған видеоконкурстарҙа – 1-се, Мостай Кәримдең шиғырҙарын һөйләү конкурсында 2-се урын яуланы. Зөлхизәнең ижади әйберҙәре республиканың башҡа гәзит-журналдарында ла баҫылып торор, тигән өмөттәбеҙ.

11 г класы уҡыусыһы **Илгизә Йәрмөхәмәтова** биш йыл уҡыу дәүерендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән регион-ара олимпиадала ике тапҡыр еңеүсе, бер тапҡыр призер булды. «Башҡортостан тарихы ил һәм ғаилә тарихы көҙгөһөндә» төбәк-ара конференцияһында – 3-сө, «Кейекбаев уҡыуҙары»нда еңеүсе булараҡ, ул башҡа төрлө бәйгеләрҙә лә үҙен һынатманы. Әүҙем тормош позицияһы, белемгә, рухи бөтөнлөккә ынтылыуы, тырышлығы Илгизәне артабан да ҙур уңыштарға, еңеүҙәргә алып килһен!

11 е класы уҡыусыһы **Илназ Исхаҡов** – аҡыллы, төплө белемле, шул уҡ ваҡытта үҙ-үҙенә талапсан булыуы менән дә ихтирам яулаған егет. Илһөйәр һәм телһөйәр уҡыусыларыбыҙҙың береһе. Түбән кластарҙан алып төрлө шиғри бәйгеләрҙә ҡатнаша. Рәми Ғариповтың 90 йыллығына арнап үткәрелгән «Уҡ осошондай ғүмер балҡышы» исемле театрлаштырылған тамашала Рәми образын уйнап, үҙен ысын актер итеп танытты, бөтә тамашасының һөйөүен яуланы. Республика кимәлендә ойошторолған «Минең Рәми» шиғри бәйгеһендә 1-се урынға сыҡты, тиҫтерҙәренә арҙаҡлы шағирыбыҙҙың әҫәрҙәрен тасуири һөйләү буйынса оҫталыҡ дәресен күрһәтте.

11 в класы уҡыусыһы **Элина Фәтхелисламова** өс йыл рәттән биология фәне буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһының төбәк-ара этабында призер булһа, быйылғы йылда ул гимназияға ҙур еңеү алып килде. Артабан Рәсәй күләмендә Башҡортостанды лайыҡлы рәүештә яҡлар, тип ышанабыҙ. Бынан тыш, Элина Мәғариф министрлығының иҫәбенә ингән башҡа олимпиадаларҙа ла призер һәм еңеүсе булды. Ошо уңыштары өсөн ул олимпиадаға төплө әҙерләнеү маҡсатында «Сириус»та уҡып ҡайтты, «Артек»та ла ял итеп өлгөрҙө. Элинанан артабан да еңеүҙәр көтөп ҡалабыҙ.

11 а класы уҡыусыһы **Айҙар Байсыуаҡов** 8-се кластан алып математиканан үткәрелгән бик күп олимпиадаларҙа еңеүҙәр яулап килә. Тәүҙә Гагарин исемендәге Кубок олимпиадаларында ҡала һәм республика кимәлендә призлы урындар яулаһа, 9-сы класта Бөтә Рәсәй уҡыусыларының математика фәне олимпиадаһының региональ турында призлы урынға сыҡты. Быйылғы уҡыу йылында шул уҡ олимпиадала, еңеүселәрҙән әҙ генә балға ҡалышып, почетлы 3-сө урынды яуланы. Бөтә уҡытыусылар, тәрбиәселәр Айҙарҙы тырыш һәм эшһөйәр уҡыусы тип беләләр. Ябайлығы, ихласлығы өсөн уны барыһы ла хөрмәт итәләр. Шул уҡ ваҡытта ул түбән класс уҡыусыларының олимпиада төркөмө менән эшләй, ҡыйын мәсьәләләрҙең сисеү юлдарын өйрәтә. Бар ерҙә лә өлгөр егетебеҙ артабан да юғары һөҙөмтәләре менән ҡыуандырып торһон.

***Искәндәр Мөхәмәтйәнов**, 7-се класс уҡыусыһы*

## ЯРАТҠАН ШӨҒӨЛӨҢДӨ ТАБЫУ – ҮҘЕ БЕР ҠЫУАНЫС

**Беҙҙең гимназияла өҫтәлмә белем биреүгә ҙур иғтибар бирелә һәм ун бишләгән түңәрәк эшләп килә. Уларҙың һәр береһе үҙенсәлекле, уҡыусыларға һәр яҡлап һәләттәрен асырға ярҙам итә. Бөгөн ес түңәрәктең етәксеһе – беҙҙә ҡунаҡта. Мин уларға үҙемде борсоған һорауҙарымды бирҙем. Яуаптар һеҙҙе лә ҡыҙыҡһындырыр, берегеҙҙе лә битараф ҡалдырмаҫ тип уйлайым.**

**Шахмат түңәрәге етәксеһе**
**РИМ МУЛЛАҒӘЛИ УЛЫ ҒӘББӘСОВ**

*– Рим Муллағәли улы, шахмат түңәрәге ҡасандан эшләй башланы? Унда тик уйнай белгәндәр генә шөғөлләнәме?*

– Өсөнсө йыл беҙҙең гимназияла шахматта уйнарға өйрәтеү эше алып барыла. Ошо ваҡыт эсендә тиҫтәләгән уҡыусы был уйындың серҙәренә төшөндө. Быйылғы сығарылыш кластарынан биш ҡыҙ бик теләп ике йыл шөғөлләнде. Һәҙемтәлә улар яҡшы ғына итеп уйнай башланы. Шахмат дәресенә төрлө кимәлдәге уҡыусылар килә. Яңы ғына уйнарға килеүселәргә оҫталыҡ дәрестәре күрһәтәбеҙ.

*– Шахмат уйнауҙың файҙаһы нимәлә?*

– Баланың аҡыл эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн иң яҡшы сара булып тора. Йөштән шахмат менән шөғөлләнеүсе балаларҙың уҡыуҙарында алға китеш ныҡ һиҙелә, бигерәк тә теүәл фәндәр еңел бирелә башлай. Шахмат аҡыл көсөн генә арттырып ҡалмай, ижади яҡтан да үҫтерә. Шулай уҡ уҡыусылар үҙҙәрен тыныс тоторға, ауыр мәсьәләләрҙе уйлап хәл итергә өйрәнә.

**«Рәми» театр-студия етәксеһе**
**АЛЬМИРА ШӘРИФ ҠЫҘЫ ҠЫУАТОВА**

*– Альмира Шәриф ҡыҙы, һеҙ – республикала киң билдәле режиссер. Бөгөн гимназияла театр түңәрәген етәкләйһегеҙ. Был теләк һеҙҙә ҡасан тыуҙы?*

– Ғүмер үткән һайын һәр бер әҙәми зат уйҙарында үҙенең тормош юлын барлап, күҙ алдына килтереп, һығымталар яһай. Мин шундай фекергә килдем: тап һеҙ уҡыған гимназия-интернат, беҙ тамамлаған интернат, миңә һөнәр һайларға, икеләнеү-шикләнеүҙәремдә еңергә ярҙам иткән. Иҫемдә, 7-се класта уҡығанда, класташым Сәрүәр Сурина «Ғәрәп» тигән тәүге пьесаһын яҙҙы. Башҡорт теле уҡытыусыһы Фәрзәнә Фаиз ҡыҙы Абдуллина миңә сәхнәләштерергә ҡушты. Ең һығанып репетициялар үткәрҙек, бик ҙур теләк менән уйнаныҡ.

*– Спектаклдә уйнау нимә бирә?*

– Кеше үҙен төрлө ситуацияларға ҡуйып ҡарай, көтөлмәгән хәл-ваҡиға килеп тыуһа, шунан сығыу, котолоу юлын эҙләй, партнерының (әңгәмәсеһенең) күҙенә тура ҡарап, асыҡ итеп һөйләргә өйрәнә. Әгәр мин яҙмышымда ниндәйҙер уңыштарға өлгәшкәнмен икән, миңә һөнәр һайлауҙа ҙур роль уйнаған мәктәбемә рәхмәттәрем сикһеҙ. Һәм, әлбиттә, ошо рәхмәтемде әйтергә, бурысымдың бер аҙ өлөшөн булһа ла түләргә тип, гимназия-интернатҡа килдем. Миңә шундай мөмкинселек биргән гимназия директоры Илнур Рифат улына бик-бик рәхмәтлемен (сөнки уға тиклем, ике директорға килеп, үтенесемде әйткәйнем, ишетмәнеләр).

*– Халҡыбыҙ ижадына хөрмәт һәм тәрбиә һеҙҙә ҡайҙан килә?*

– Әлбиттә, беренсенән, ғаиләнән. Минең өләсәйем бик уҡымышлы кеше булды: ул гәрәп һәм фарсы телдәрендә иркен уҡыған, кисаларҙы һөйләгән, әкиәттәрҙе көйләгән, беҙгә ваҡытын йәлләмәгән йомшаҡ күңелле өләсәй ине. Икенсенән, әтейем (атайым) һәм уның яғы туғандарым һәр ваҡыт: «Беҙ – дворяндар, беҙ уҡырға тейеш, беҙҙең атай-олатайҙар старшиналар булған, ярлы-ябаға балаларын уҡытҡандар, кешегә һәр ваҡыт ярҙам иткәндәр», – тип үҫтерҙеләр. Ә инде интернаттың һалған рух тәрбиәһе баһалап бөткөһөҙ! «һеҙ – беренсе интернат уҡыусылары, киләсәктә һеҙ етәкселәр, лайыҡлы милли кадрҙар булырға тейешһегеҙ, тырышып уҡығыҙ», – тип кәнә торҙолар. Әгәр беҙҙең ниндәйҙер фәндән дәресте аңламағанды күрһәләр, уҡытыусылыр төштән һуңға ҡалып эшләнеләр. Беҙ, төшкә ашты ашағас, йүгереп киләбеҙ. Улар, дәресте яңынан аңлатып, төшөндөрөп, ҡайтып китәләр. Башҡорт һәм рус әҙәбиәте дәрестәрендә Тыуған ил, уны яҡлау, һаҡлау тураһында ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс дискуссиялар йыш үткәрелде. Рус теле уҡытыусыһы Мөкәрәмә Мәхмүт ҡыҙы Байгилдина уҡыусыларҙа илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләүгә айырыуса ҙур иғтибар бирҙе.

Беренсеһәр һәр ваҡыт беренсе булып ҡала. Әле лә гимназия-интернатта юғары квалификациялы белгестәр, республика ғорурлығы булған уҡытыусылыр, тәрбиәселәр эшләй. Балаларға, ҙур маҡсаттар ҡуйып, бары тырышып белем алырға (бушты-бушҡа ауҙарып йөрөргә түгел инде) ғына ҡала. Барлыҡ беренселәргә уңыштар теләйем!

**«Аҡйондоҙ» өлгәлә бейеү ансамбле етәксеһе АЛМАЗ ИЛФАТ УЛЫ ТАКАЛОВ**

*– Алмаз Илфат улы, бейеүсе кеше ниндәй сифаттарға эйә?*

– Бейеүсе булырға теләүсе балалар иғтибарлы, маҡсатка ынтылышлы булырға тейеш. Бейегән ваҡытта ритмды, үҙеңдең тәнеңде тойоу, сәхнә киңлеген аңлау мөһим.

*– Бейеүсене ябай кешенән ниндәй һыҙаттар айыра?*

Бейеүсе әлләә ҡайҙан айырылып тора: һығылмалы, кәүҙәһен тура тота, йыйнаҡ, матур атлап йөрөй.

**Кешегә һәр саҡ үҙ өҫтөндә эшләргә кәрәк, тип иҫәпләйем. Был тәңгәлдә гимназиялағы барлыҡ түңәрәктәр уҡыусыларға ҙур мөмкинселек бирә. Күңеленә яҡын булғанын һайла ла, рәхәтләнеп шөғөллән генә. Гимназистар, әлегә тиклем үҙ йүнәлешеңде һайламаған икәнһең, тимәк, ваҡытың бушҡа үтә. Әйҙәгеҙ, мөмкинселекте ваҡытында файҙаланып ҡалайыҡ.**

*Әңгәмәне 10 б класы уҡыусыһы*
***Сара Истәкова** ойоштороо*

## О ДЕКАДНИКЕ УЧИТЕЛЕЙ ИНОСТРАННЫХ ЯЗЫКОВ



Иностранному языку принадлежит важное место в системе воспитания и подготовки современного ученика в условиях поликультурного и полиязычного мира. Если вспомнить цитату «Границы моего языка – это границы моего мира», которая принадлежит известному австрийскому философу и специалисту в области логики Людвигу Йозефу Иоганну Витгенштейну, то можно сказать, что учителя английского языка способствуют расширению границ мировосприятия своих учеников, открывая им двери в другие культуры, без чего в быстроразвивающемся современном мире никак не обойтись, если хочешь идти в ногу с ним, самореализоваться, найти свое место в обществе. Знание иностранных языков – это другое видение жизни, что развивает у человека аналитическое или критическое мышление, то есть позволяет человеку развиваться как личность.

Декадник английского языка занимает особое место в череде мероприятий, направленных на достижение этой цели, являющийся прекрасной возможностью поделиться с коллегами результатами своей работы, проверить знания обучающихся и погрузиться в мир английского языка. В этом году декадник английского языка прошел с 12 по 22 декабря 2022 года. Первым мероприятием, открывавшим декадник, стала игра «Christmas Quest» среди учащихся команд 7-8 классов, которую организовали молодые учителя Абдуллина Алсу Гиндулловна и Самситова Рушана Ильшатовна. Ребята исполняли песни на английском языке, угадывали названия песен и мультфильмов, отгадывали загадки и ребусы. Стремление помериться своими силами, проверить знания, умения, навыки в соревновании с друзьями, нести ответственность за команду, желание заслужить одобрение сверстников, возможность узнать что-то новое – все это придавало деятельности учащихся осознанно мотивированный характер.

Также увлекательно и интересно прошла интеллектуальная игра «Что? Где? Когда?» среди учащихся 10 классов, которую подготовила и провела учитель английского языка Мифтахова Ильнара Тагировна. Ребята увлеченно отвечали на вопросы, продемонстрировав высокий уровень знания страноведения страны изучаемого языка.

Не менее занимательным оказалось внеклассное мероприятие в 8 д классе «Sweet party», которое провела Зиннатшина Зульфия Агзамовна. Учащиеся дарили друг другу сладкие подарки, завернутые в обертки, которые делали своими руками. Все это сопровождалось музыкальными номерами на английском языке.

В рамках декадника состоялся обмен опытом, который прошел в форме открытых уроков, проведенных учителями методического объединения гимназии: «Robots» в 9 б классе (Колпакова Ю.А.), «Christmas» в 8 б классе (Мифтахова И.Т.), «Computer problems» в 9 е классе (Мухаметзянова А.Р.), «Robots» в 9 г классе (Самситова Р.И.), «Understanding Shakespeare» в 10 д классе (Шакиров И.М.), «Past Continuous» в 7 б классе (Абдуллина А.Г.), «Environmental protection» в 10 б классе (Зиннатшина З.А.). Каждый учитель творчески подошел к проведению урока и были продуманы все его этапы. Также велась большая работа по формированию языковой компетенции у учеников. Были использованы нетрадиционные формы работы с детьми, а также ИКТ с целью повышения мотивации к изучению иностранного языка.

На протяжении всей декады редколлегиями классов выпускались стенгазеты на тему «Christmas is coming». Все ребята приняли самое активное участие и выпустили очень яркие стенгазеты, плакаты, подготовили проекты.

Учащиеся гимназии приняли участие в различных конкурсах и олимпиадах. Знатоки английского языка 7-8 классов участвовали в школьном этапе Республиканской олимпиады на кубок имени Юрия Гагарина и в международной олимпиаде «Фактор роста». Выпускники 11 классов проверяли свою готовность к итоговой аттестации по английскому языку на пробном ЕГЭ. Все успешно прошли испытание.

Ребята остались довольны проведенными мероприятиями, получили удовлетворение от удачных ответов, от интересных и познавательных заданий. Проведение тематической декады потребовало большой подготовки со стороны учителей и обучающихся, но было полезно как в языковом, так и в общеобразовательном плане. Обучающиеся могли проявить свою фантазию, артистизм, творчество и знания по данному предмету, а через игру у ребят воспитывался интерес к иностранным языкам.

***И. М. Шакиров,***
*руководитель МО иностранных языков*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ АҘНАЛЫҒЫ

Һәр йылдың февраль айында гимназияла башҡорт теле һәм әҙәбиәте аҙналығы үтә. Быйыл да ул төрлө йүнәлешле сараларға бай булды. Дәрестәрҙә мәктәп-интернаттың сығарылыш уҡыусыһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Гариповтың биографияһын өйрәнеү, шиғырҙарын уҡыу, ятлау, йырҙарын тыңлау ойошторолдо. Ҡылысова Гөлсәсәк Салауат ҡыҙы шағирҙың рухына арналған линейка үткәрҙе. Сарала тел белгесе, профессор, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисамитдинованың ҡатнашыуы оло мәртәбә булды. Шулай уҡ шағирҙың тормошо һәм ижадына арналған квиз уйындары үтте. Сараны башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды, Башҡортостандың йәш яҡташтар ассоциацияһы һәм республиканың «Тыуған яҡты өйрәнеүселәр йәмғиәте» ойошторҙо.

Уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереүгә лә ҙур иғтибар бүленә. Аҙналыҡ барышында «Йәншишмә» гәзите мөхәррире Мирсәйет Ғүмәр улы Юнысов (А.Х. Кайбышева), Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипова менән осрашыуҙар ҙа (Р.М. Алламоратова) шул хаҡта һөйләй.

Һуңғы йылдарҙа йәмғиәттә үҙеңдең тарихи тамырҙарың менән ҡыҙыҡһыныу, нәҫел ептәрен барларға ынтылыш арттандан-арта бара. Ошоно иҫәпкә алып, Әминева Лилиә Искәндәр ҡыҙы сығарылыш уҡыусыбыҙ, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәре, фарсы теле һәм әҙәбиәте белгесе Әбүбәкерова Зәлифә Ғәрифйән ҡыҙы менән осрашыу үткәрҙе. Балаларға уның сит илдә уҡып ҡайтыуы, Иранда Бәшкәрт халҡы менән осрашыуы бигерәк тә ҡыҙыҡлы булды. Римма Мирсәйет ҡыҙы Тимербулатова Мәжит Ғафури Мемориаль йорт – музейы мөдире, филология фәндәре кандидаты Ғәзилә Мөҙәрис ҡыҙы Буләкова һәм музей хеҙмәткәре Рита Кәбир ҡыҙы Стеничкинаны осрашыуға саҡырҙы. «Улар Сталинградты һаҡланы» тигән бай йөкмәткеле сарала 1943 йылдың 2 феврале Ватаныбыҙҙың ҡаһарманлығын, батырлығын күрһәткән, беҙҙе еңеп булмауын дәлилләгән көн булып Ер шары тарихында һаҡланып ҡалыуы, Сталинград һуғышында ҡатнашҡан яҙыусы – шағирҙар хаҡында күп мәғлүмәт алдылар уҡыусылар.



Беҙҙең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары – бөтәһе лә юғары категориялы, төрлө бәйгеләрҙә ҡатнашып, юғары һөҙөмтәләр күрһәткән педагогтар. Бөйөк педагог В.А. Сухомлинскийҙың «Дәрес – ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һәм әхлаҡи инаныуҙар факелын тоҡандырыусы беренсе осҡон» тигән бөйөк һүҙҙәрен онотмайҙар улар. Г.С. Ҡылысова һәм Р.М. Тимербулатова үткәргән, заман талаптарына ярашлы төҙөлгән дәрестәр юғары кимәлдә үтте, тип билдәләнде.

***А.Х. Кайбышева,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары методик берекмәһенең етәксеһе*

*Таныш булығыҙ: Регина Бирғәлина, 10 е класында белем ала. Яҡшы билдәләргә өлгәшә. Юғары уҡыу йортонда белем алырға уйлай. Һуңғы арала ул тормош тураһында күп уйлана, фәлсәфәүи һорауҙарға яуап эҙләй. «Иҫке туған ағайым һуғышҡа алынғас, атай-әсәйемдең, яҡын туғандарымдың ҡәҙерен нығыраҡ аңлай башланым», – ти ул.*

## Ғаилә

Был донъяла кешенең үҙен тулы бәхетле итеп тоя торған бер нәмәһе бар. Ул – ғаилә. Ғаилә – кеше өсөн иң ышаныслы урын. Ҡайҙа булыуға ҡарамаҫтан, ул шуны яҡшы аңлай: өйҙә уны мотлаҡ ата-әсәһе, өләсәһе-олатаһы, бер туғандары көтә. Ата-әсәнең һөйөүенән дә көслө хис юҡтыр. Уларҙың балаларына булған һөйөүе бер ҡасан да һүнмәҫ. Ғаилә – кеше өсөн бер мөғжизәле донъя ул. Һәм беҙ ғаиләбеҙҙең һәр ағзаһын ҡәҙерләргә, уларға ауыр ваҡытта ярҙам ҡулын һуҙырға бурыслыбыҙ.

Шуныһы мөһим: ғаиләлә һәр кем, шул иҫәптән бала ла, үҙ хоҡуҡтары һәм бурыстары булыуын, яҡындары хаҡында хәстәрлек күрергә кәрәк икәнлеген аңларға тейеш. Тормош булғас, төрлө хәлдәр була: кемдер тулы, татыу ғаиләлә бәхетле йәшәй, ә кемдәндер атаһы йәки әсәһе юҡ, ҡайһы берәүҙәр бөтөнләй етем. Ғаиләнең ныҡлығы, бәхете уның барлыҡ ағзаларының бер-берене менән ниндәй мөнәсәбәттә булыуынан тора. Шуға күрә бөтә ата-әсәләр ҙә айыҡ тормош менән йәшәһен, балаһын ташламаһын ине. Балаларҙың ололарға ышанысы булһа, уға йәшәүе еңелерәк. Тап шул саҡта ғына тормоштоң мәғәнәһе лә, йәме лә булыр. Һәр кем ғаилә усағында бәхеткә ҡумелеп, бер-берененең ҡәҙерен белеп, тыныслыҡта йәшәһен...

## Атай-әсәй

Атай-әсәйҙең иң ҡәҙерле кешеләр икәнлеген ситкә киткәс кенә ныҡлап аңланым. Уларҙы хәлдән килгәнсә хөрмәтләргә һәм һаҡларға кәрәк икәнлеген дә төшөндөм. Атай-әсәйҙең мөхәббәтен башҡа бер нәмәгә лә алыштырып булмай. Ҡайһы саҡта эш боҙһаҡ та, ғәйепле булһаҡ та... Уларҙың беҙгә булған мөхәббәте һүрелмәҫ.

Уҡыу тураһында уйлап, төрлө проблемаларҙы хәл итәм тип йүгергеләй торғас, атай-әсәйебеҙҙең барлығын да онотоп китәбеҙ. Йәнәһе лә ваҡыт юҡ. Кәрәк саҡта рәхмәт һүҙен дә йәлләйбеҙ. Дөрөҫ түгел был!

Минеңсә, ошо матур, мөғжизәле тормошто бүләк иткәндәре өсөн генә лә беҙ уларға рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Һөйөү менән тулы ихлас теләктәребеҙҙе, күңелдә булған хис-тойғоларҙы ваҡытында әйтергә онотмайыҡ, тиҫтерҙәрем. Ғүмер бер генә бит...

## Һағыныу

Тормошта бик ҡатмарлы хәлдәр була. Яҡын кешеләр менән оҙаҡҡа, ә ҡайһы берҙә мәңгегә хушлашырға тура килә, был хәл үтә лә ҡыйын. Берәй арауыҡҡа ғына китһәләр, уларҙы һағыныып та өлгөрмәйһең. Ҡайһы саҡта уларҙы шул тиклем һағынабыҙ, күҙтә ял алып булмай. Илап ултырыуҙар ҙа һис килешмәй. Был турала күп уйламаҫ өсөн, икенсе эштәр менән булашабыҙ, дуҫтар менән ваҡытты уҙғарырға тырышабыҙ. Сөнки берәй шөғөл тапһаң, ваҡыт тиҙ үтә. Их, яҡын кешеләребеҙ бер ҡайҙа ла китмәһә, ҡайһылай яҡшы булыр ине...

## Ваҡыт

Ваҡыт үтә, тормош үҙгәрә. Кешеләрҙең дә тормошҡа ҡарашы үҙгәрә. Әгәр ҙә ваҡыт бер ерҙә генә торһа, беҙ тормоштоң матурлығын, уның мөғжизәләрен, үҙгәрешен, сәскәләрҙең атыуын күҙәтә алмаҫ инек. Улар беҙгә лә тәьҫир итмәй ҡалмай, уларҙы ваҡытында күреп, һиҙеп, һоҡланып ҡалыр өсөн, бик иғтибарлы булырға кәрәк.

## «ЙӨРӘК ҺҮҘЕ» ЙӨРӘКТӘРГӘ ҮТЕП ИНДЕ

Республикала уҙғарылған «Йөрәк һүҙе» тамашаһы беҙҙең гимназияла шулай уҡ матур йолаға әйләнеп бара. Дүрт йыл рәттән үткәрелә. Сараның популярлығын һайлау турында ҡатнашҡан уҡыусыларҙың күплегенә ҡарап та билдәләп була. Яңыраҡ үткәрелгән был сарала, бар һәләтен һалып, залдағыларҙың күңелен яуларлыҡ ҡыҙҙар һәм егеттәр ярышты. Ысын рух байрамына әүерелде был тамаша. Ҡатнашыусылар тыуған ергә, илһөйәрлек темаһына арналған шиғырҙарҙы һөйләгәндә, кемдер әкрен генә иланы, кемдер көрһөндө, һоҡланды. Шуға ла иғтибар итмәү мөмкин түгел: ҡатнашыусылар бер-берененән тасуири һөйләргә өйрәндә, өлгә алды, тәжрибә тупланы, үҙенә башҡорт рухын, дәртен һеңдерҙе.

Баһалама ағзалары араһында билдәле сығарылыш уҡыусыларын күреү бәйгеселәргә тағы ла ҙур яуаплылыҡ өҫтәне: ошо проекттың авторы Наилә Сәфәрғолова, Риф Ғәбитов, Әлмира Ҡыуатова, Зилә Дибаева. Иң-иңдәрҙе һайлап алыу, әлбиттә, ауыр булды, ләкин билдәләнгән урындар менән барыһы ла риза ҡалды. Шулай итеп, Гран-призы – 8 а класынан Азалина Бүләкова, 1-се урынды – 10 в класы уҡыусыһы Эльвина Ғәббәсова, 2-се урынды – 9-сы класс уҡыусыһы Диниә Сафина, 10-сы класс уҡыусыһы Айгизә Шәһиева, 3-сө урынды иһә 8 г класынан Зилиә Халикова яуланы. Урындан тыш, номинациялар ҙа бирелде. Ләкин мин бәйгеселәрҙең барыһын да еңеүсе тип иҫәпләйем.

Был проектҡа нигеҙ һалыусы Наилә апай Сәфәрғолова ҡатнашыусыларға иҫтәлекле сувенирҙар бүләк итте, бер аҙ күңел кисерештәре менән дә уртаҡлашты. Тәрбиәселәр Рим Муллағәле улы, Таңһылыу Хәкимйән ҡыҙы, Зәлиә Сәғит ҡыҙы ҙур эш башҡарып сыҡтылар. Алдан әҙерлек эше алып барып, 16 уҡыусының сәхнәгә сығарыуы бик яуаплы эш икәнен барыбыҙ ҙа аңлап торабыҙ.

Йөрәктәргә үтеп ингән был сара беҙҙең күңелдәрҙә оҙаҡ һаҡланыр.

***Эльвина Ғәббәсова**, 10 в класы уҡыусыһы*

## ҺУҒЫШ БАЛАЛАРЫ – ҺУҒЫШ ЯРАЛАРЫ



17 февралдә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатының китапхана залында Марат Хафизов һәм Юлай Әбсәләмовтың «һуғыш балалары» китабының исем туйы үтте. Күркәм сараны гимназия-интернаттың директор урынбаҫары Азамат Закир улы Шәмсетдинов асып ебәрҙе. Артабан һүҙ хөрмәтле ҡунаҡ, китап авторы, 1991–1994 йылдарҙа гимназия-интернат коллективын етәкләгән, Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Марат ағай Хафизовҡа бирелде. Автор китаптың яҙылыу тарихы, гимназияға ҡағылышлы хәтирәләре менән бүлешеп, уҡыусыларға матур теләктәрен еткерҙе.

Тәҡдим ителгән китапта һүҙ дәһшәтле Бөйөк Ватан һуғышы йылдары һәм һуғыштан һуңғы осорҙа 9-сы мәктәптә уҡыған һәм уны тамамлаған уҡыусыларҙың тормошо күрһәтелә. 40-лаған сағыу шәхестең күптәргә өлгө булырлыҡ, фәһем алырлыҡ яҙмышы, уларҙың яулаған үрҙәре һәм ирешкән уңыштары тураһында бәйән ителә.

Сараға йыйылған ҡунаҡтарҙың һәр береһе, өлкән фән хеҙмәткәре, фән кандидаты Юлай Әбсәләмов, Фәнис Ғәйнетдин улы Исхаҡов, Иҫхаҡов, уның тормош иптәше, йәмәғәт эшмәкәре Альбина Хашим ҡыҙы Исхакова, техник фәндәр докторы Эрнст Мирсаяф улы Юлбарисов, Ләлә Ғибәт ҡыҙы Биишева, Әхнәф Дәүләтйәр улы Тимербулатов үҙ хәтирәләре, тормош һынауҙары менән уртаҡлашты. Уҡыусыларҙың ни тиклем бәхетле заманда йәшәүҙәрен һыҙыҡ өҫтөнә алып, рухлы, сәмле, сәләмәт тормош яҡлы булыуҙарын һәм туған телдә һаҡлау бурысын еткерҙеләр.

Сара Сөмбәл Бикмаева башҡарыуында Рәми Ғариповтың «Тормош», Эльвина Ғәббәсова Салауат Әминевтың «Шинель – юрған, түң ер – түшәгең» шиғырҙары, уҡыусыларҙың «һәр ваҡыт булһын ҡояш» йыры менән тағы ла йәнләнә төштө. Алып барыусылар, 10-сы класс уҡыусылары Мөхәмәтова Гөлсинә һәм Бикмаева Сөмбәл, тыныс күк йөҙө теләп хушлашты.

***Әнүзә Фәрит ҡыҙы Хәлилова**, китапханасы*

## «ЙӘНШИШМӘ» – БЕҘҘӘ ҠУНАҠТА

18 февралдә башҡорт теле һәм әҙәбиәте кәндәре сиктәрендә «Йәншишмә» гәзитенең баш мөхәррире Мирсәйет Юнысов менән осрашыу үтте. Уҡытыусыбыҙ Альбина Хәсән ҡыҙы Ҡайбышева 1981 йылғы билдәле сығарылыш уҡыусыһын 8 б класына асыҡ дәреҫкә саҡырҙы. Дәрестең тәүге яртыһында журналистика, матбуғат донъяһы, гәзиткә яҙылыу һәм уҡыу, «Йәншишмә» гәзитенең рубрикалары тураһында фәһемле әңгәмә ойошторолдо. Уҡыусылар төҙөгән кроссвордтарҙы систек. Артабан Башҡортостан һәм Рәсәйҙең Журналистар союзы ағзаһы, атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, мәғариф алдынғыһы Мирсәйет Ғүмәр улы һүҙ алды. Интернатта уҡыған йылдарын бик йылы һүҙҙәр менән телгә алды журналист. «Бындай уҡыу йорто бүтән бер ерҙә лә юҡ», – тине ул ғорурланып. 25 йыл журналистика өлкәһендә хеҙмәт иткән Мирсәйет Ғүмәр улы үҙе уҡыған мәктәбе менән һәр ваҡыт тығыҙ бәйләнештә эшләй. Уның эскерһеҙ ярҙамын беҙ әленән-әле күреп торабыҙ, сөнки яҙышҡан балалар мәҡәләләрен, шиғырҙарын үсмерҙәр өсөн сыҡҡан «Йәншишмә» гәзитенә ебәрә, тәүге аҙымдарын ошонда һынай. Был гәзиттең тарихын һөйләгәндә, уның исеменә лә туҡталдыҡ. «Урал батыр» эпосындағы Йәншишмәнән алынған икән. Йәншишмәнең һыуы тәбиғәткә йән өргән кеүек, гәзит тә булаҫаҡ журналистарға юл аса, ҡанатын нығыта. Был осрашыуҙа ла шиғыр, ҡобайыр яҙған уҡыусылар үҙҙәрененең ижадын уҡып ишеттерҙе. Йөнле әңгәмә аҙағында Мирсәйет Ғүмәр улы гимназистарға изге теләктәрен еткерҙе, гәзит календарын бүләк итте. Барыбыҙ ҙа осрашыуҙан илһамланып сыҡтыҡ.

***Мәҙинә Хәмиҙуллина**, 8 б класы уҡыусыһы*




## СПОРТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

Декабрь айында йыл һайын үткәрелә килгән волейбол ярышында 10а класы 1-се урынға сыҡты һәм Рәми Ғарипов кубогына эйә булды.

Гимназияла волейбол буйынса төрлә ярыштар үткәрелеп тора. Мәҫәлән, ғинуар айында М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның физкультура факультеты һәм Ейәнсура районының йәштәр командалары ярышты. Һуңғы турнирҙа гимназия-интернат – Ейәнсура – БДПУ командалары араһында беҙҙең егеттәр 2-се урын яуланы.

Февраль айында Өфө ҡалаһының Октябрь районында уҡыусыларҙың «Кәмеш туп» бәйгеһендә ҡыҙҙар - 5-се, егеттәр 1-се урынға сыҡты. Өфө ҡалаһы беренселегендә иһә егеттәр 3-сө урынды яуланы.

Волейбол түңәрәге етәксеһе Гөлфиә Атаулла ҡыҙы Зәйнүтдинова - был спорт төрөнөң үҫешенә күп көс һалған уҡытыусы. Уға һәм волейбол командаһына артабанғы уңыштар, дәрт, сәмле ярыштар теләйек.

18 февраль көнө Өфө манежында еңел атлетика ярышында Ҡәҙерова Алһыу - 3-сө, 600 һәм 1000 метрға Солтанғужин Вилдан - 3-сө, 1000 метрға Күсемов Айгиз 3-сө урынға сыҡтылар. 25 февралдә ҡышҡы кроста Ҡәҙерова Алһыу һәм Вәлитова Вилиә икеһе лә 3-сө урынды яуланы. Түңәрәк етәксеһе Фәйзулла Ғәбдулйән улы Абдрафиковҡа һәм еңел атлеттарға артабан да еңеүҙәр, ныҡлы сәләмәтлек теләйек.

Өфө ҡалаһында Александр Мастросов призына үткәрелгән саңғы эстафетаһында гимназистар бронза миҙалын яуланы. Етәкселәре Адис Ирнис улын һәм саңғыселарҙы һәҙөмтәле ярыш менән ҡотлайбыҙ!

***Э. Р. Кунсбаева**, физкультура уҡытыусыларының МБ етәксеһе*

Учредитель газеты: Башкирская республиканская гимназия-интернат № 1 им. Р. Гарипова г. Уфа, ул. Российская, 88. Тел.: 284-66-09

Редколлегия: С. Истякова, И. Мухамедьянов, Э. Габбасова, Г. Мухаметова

Редакторы: Клысова Г.С., Кайбышева А.Х.

Газета отпечатана в ООО «Издательство «Белая река» (450078, РБ, г. Уфа, ул. Кирова, 109) Тел.: 279-80-43. E-mail: wr@wriver.ru

Объем издания 1 печ. лист. Подписано в печать 15.03.23. Заказ 230404. Тираж 250 экз.